# Китап алһаң ҡулыңа, нур һибелер юлыңа

Гүзәл Башҡортостаныбыҙҙың оло юбилейына һәм театр йылына арнап район китапханаһында "Китап уҡыусы ғаилә" исемле конкурс уҙғарылды. Әйтергә кәрәк, был бәйгелә күберәк йәш ғаиләләр ҡатнашты. Ауылдарҙан килгән һәр ғаилә башҡорт милли аш – һыуынан, ҡул эштәренән торған күргәҙмә ойошторҙо. Аҫҡарҙан Хисмәтовтар ғаиләһе ҡурсаҡтар, ә Һамарҙан килгән Мөхәмәтшиндар эш ҡоралдары, уйынсыҡтар ҙа эшләп килтергәйне.

Райондың иң төпкөл ауылдарының береһе булған Хәмиттән Мөлөковтар ғаиләһе ҡуйған күргәҙмә иң байы, иң күркәме булғандыр, моғайын. Аш – һыуҙың, үҙҙәре теккән милли кейемдәрҙең күп төрлө булыуы шунда уҡ күҙгә ташланды. Ғөмүмән, ҡайһы ғына ғаиләне алһаң да, һәр кем милли кейемдәрҙән алып, эш ҡоралдары, ҡурсаҡтар, түшәк – юрғандарға тиклем барыһын да алып килгәйне.

Бәйгелә барлығы ун ике ғаилә ҡатнашты. Тәүге турҙа конкурсҡа ҡатнашыусылар үҙҙәре менән таныштырҙылар. Һәр команданың исеме, девизы күңелгә ятышлы шиғри формала булыуы менән иғтибарҙы йәлеп итте. Мәҫәлән, Һамарҙан килгән Мөхәмәтшиндар ғаиләһенең исеме "Китап – тоғро дуҫыбыҙ" булһа, девизы "Ҡулыма алһам китап, күңелем булыр бик шат". Балалары Илсур, Нурзилә, Асия ла сығыш яһаны был бәйгелә. Рауилдан Ғибәҙәтовтар , Аҫҡарҙан Хисмәтовтар, Салауаттан биш бала тәрбиәләгән Ғөбәйҙуллиндарҙың сығыштары ла бай йөкмәткеле булды. Иҙәш Ҡуҫҡарынан килгән Шәриповтар үҙҙәренә исемде "Нурлы ғаилә" тип алһа, девиздары ла шуға ярашлы шиғри формала уйлағандар: "Китап алһаң ҡулыңа, нур һибелер юлыңа". Бөтә ғаиләләрҙең дә сығышын, әлбиттә, балалар биҙәне. Атауҙынан биш бала тәрбиәләгән Ғәббәсовтар ғаиләһенән килгән Максим Новиков менән Полина Скурлаева М.Кәримдең "Россиянмын" һәм "Ҡайын япрағы тураһында" шиғырҙарын саф башҡорт телендә һөйләп ишеттерһәләр, Салауат ауылынан Ғөбәйҙуллиндар ҙа күмәкләп Башҡортостан тураһында йыр башҡарҙылар, шиғыр ҙа һөйләнеләр. Эйе, был ғаиләлә лә биш бала тәрбиәләнә. Хәмиттән килгән Мөлөковтарҙың Әнфисә исемле ҡыҙҙары матбуғатҡа әүҙем яҙышҡаны өсөн "Аманат" журналының йәш хәбәрсе исемен алһа, бокс буйынса Башҡортостан Республикаһының чемпионкаһы исеменә лә лайыҡ булған.

Бәйгенең икенсе өлөшөндә һәр ғаилә үҙҙәре уҡыған әҙәби әҫәрҙән өҙөк сәхнәләштереп күрһәтте. Әйтергә кәрәк, күптәре арҙаҡлы шағирыбыҙ М.Кәримдең "Беҙҙең өйҙөң йәме", "Оҙон – оҙаҡ бала саҡ", "Өс таған" һәм "Әлфиә хикәйәләре"н һайлаған.

Шуныһы ҡыуаныслы: Үтәгәндән Ялмырҙиндар, Рауилдан Ғибәҙәтовтар, Әбделмәмбәттән Ҡарасбаевтарҙың сәхнә күренештәрендә тик балалар ғына сығыш яһаны. Үтәгән уҡыусылары Шайморат Зәһитов менән Раян Ялмырҙиндар Әсғәт менән Кендек ролдәрен ысын артистарҙан бер ҙә кәм башҡармаһылар. Аҫҡарҙан Батталовтар ғаиләһе Хужа Насретдин мәҙәктәрен, ә инде Сиҙәм ҡасабаһынан Низамовтар Кәбир Аҡбашевтың "Һипкелле ҡыҙ" әҫәрен сәхнәләштереп күрһәтте. Уларҙың сығыштарын да тамашасылар алҡыштар менән оҙаттылар. Башҡорт әҙәбиәте, Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте буйынса бәйгене алып барыусы Айгөл Тоҡомбәтова әҙерләгән викторина һорауҙарына яуап биреү буйынса ла ғаиләләр араһында белемле, ғилемле кешеләрҙең күп булыуы билдәле булды. Сиҙәмдән Низамовтар, Аҫҡарҙан Хисмәтовтарҙы, Әбделмәмбәттән Ҡарасбаевтар менән Байымдан Мәхмүтовтарҙы тап ана шундайҙар рәтенә индерергә була.

Дөйөм иҫәп буйынса бәйгелә Үтәгән ауылынан Ялмырҙиндар ғаиләһе гран – при яулаһа, Хәмиттән Мөлөковтар, Аҫҡарҙан Хисмәтовтар менән Һамарҙан Мөхәмәтшиндарҙың сығыштары беренсе һәм икенсе урындар менән билдәләнде. Ә инде өсөнсө урынға Атауҙынан Ғәббәсовтар, Низамовтар (Сиҙәм), Батталовтар (Аҫҡар) сыҡты. Ҡалған ғаиләләрҙең сығышы төрлө номинацияларҙа билдәләнде. Еңеүселәрҙең барыһына ла ҡиммәтле бүләктәр менән дипломдар тапшырылды.



**Зөһрә Кашапова,**
*Аҫҡар ауылы.*

Йондоз.-2019-24.04.